*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*



# Йыр шишмәһен асыусы

*Йыр — кешенең ғүмерлек юлдашы. Оҙон һәм ырау юлдар ҙа йыр менән еңелерәк үтелә. Ә йырсы кеше иһә үҙенең генә түгел, башка бик күп йыр һөйөүселәрҙең ғүмер һукмағын биҙәй. Йырҙары менән бәйгеләрҙә еңгән, халык күңелен яулаған йырсылар байтак: Радик Гәрәев, Геннадий Родионов, Венер Мостафин, Флүрә Килдейәрова, Нәзифә Ҡадирова, Иҙрис Ғәзиев, Ғәли Хәмзин һ.б. Бөтә Союз, Рәсәй конкурстарында лауреат исемен яулаған йырсылар. Аскар Абдразаковты, Светлана Арғынбаеваны бөтә донъя алкышлай. Бик күп улар . Ә бына ошо сәнғәт йондоҙҙарына кабынырға ярҙам иткән кешеләрҙең хеҙмәте айырыуса баһалап бөткөһөҙ. Миләүшә Ғәли кыҙы Мортазина тап ошондай шәхес.*

...Йыр донъяһында балҡып ҡалған йырсы Радик Гәрәевтың беренсе авторлыҡ концерты әле лә яҡшы хәтерҙә. Опера һәм балет театры халыҡ менән шығрым тулы ине. Бер нисә көн барған концерттар ҙур уңыш менән үтте. Концерттан һуң Миләүшә Ғәли ҡыҙы ла сәхнәгә күтәрелде һәм Радикты, үҙ балаһы кеүек ҡосаҡлап, ихлас ҡотланы. Икеһенең дә күҙҙәрендә шатлыҡ йәштәре емелдәй ине.

Илебеҙҙә беренсе булып халыҡ-ара конкурста Гран-при яулаған Радик Гәрәев уҡытыусыһының ышанысын аҡланы. Ғөмүмән, Миләүшә Ғәли ҡыҙының бөтә уҡыусылары ла, элеккеләре лә, хәҙергеләре лә, талантлы һәм тырыш булыуҙары менән айырыла. Уҡытыусылары шулай өйрәткән уларҙы.

...Миләүшә Ғәли ҡыҙы Сәрмәсән буйында, Кушнаренко районының Баҡай ауылында тыуған. Ата-әсәһе Өфөгә күскәндә Миләүшә бәләкәй була. Шулай ҙа Сәрмәсән буйҙарының матурлығын онотмай. Радио йәки телевидение аша Сәрмәсән тураһында йыр яңғыраһа, әле лә һоҡланып тыңлай ул.

Миләүшә мәктәптә уҡығанда уҡ сәнғәтте үҙ итә. Дәрестән буш саҡтарында Пионерҙар йортондағы түңәрәккә йөрөй. Әммә ҡәһәрле һуғыш ҡыҙҙың хыялдарын селпәрәмә килтерә. Яңы ғына 15 йәше тулған Миләүшә Мортазина, фронтҡа ебәреүҙәрен һорап, хәрби комиссариатҡа юл тота. Әлбиттә, фронтҡа алмайҙар уны. Шулай ҙа ныҡышмал ҡыҙ кире сигенмәй. Уҡыуын ташлап, заводҡа эшкә урынлаша. Ил өҫтөнә килгән һуғыш ғәрәсәте, ҡайғы-хәсрәт сәнғәт тураһында уйҙарын ҡалдырып торорға мәжбүр итә. Үҫмер ҡыҙға ир-егеттәр менән йәнәш баҫып эшләүе еңелдән булмай, әлбиттә. Әммә Миләүшә түҙә.

Бер-бер артлы йылдар үтә. Ҡыҙыл Армия ғәскәрҙәре фашист илбаҫарҙарын илдән ҡыуа башлай. Халыҡ күңелендә өмөт уты көсәйә. Йыр-моңға һыуһаған йәштәр үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәктәренә берләшә. Унда ҡатнашыусылар эштән буш ваҡыттарында заводтарҙа, госпиталдәрҙә концерттар менән сығыш яһай.

Бына Еңеү көнө лә килә. Авиация институтына уҡырға барырға тәҡдим итһәләр ҙә, Миләүшә сәнғәт һуҡмағын һайлай. Тәүҙә Свердловск консерваторияһы ҡаршыһындағы башҡорт милли студияһында, артабан Ҡазан консерваторияһында белем ала. 1954 йылда вокал бүлеген тамамлаған Миләүшә Мортазина Өфөлә филармонияла эш башлай. Йырлай, бер үк ваҡытта училищела уҡыта. Сәхнә үҙенә



05-2001.p65 133 27.07.01, 12:22

ылыҡтырһа ла, Миләүшә Ғәли ҡыҙы үҙенең педагог һәләтен нығыраҡ тоя.

Шуға күрә икегә бүленмәй, үҙен киләсәктә йыр уҡытыусыһы итеп күрә, йәш таланттарҙы табырға, асырға, үҫтерергә тигән хыял үҙенә тарта. Бына шулай йырсылар остазы Миләүшә Ғәли ҡыҙы Мортазина тыуа.

Педагогик уңыштары һанап бөтөрлөк түгел. Шулай ҙа тәүгеһенән башлайыҡ. Илфаҡ Смаков — беренсе ҡыуанысы уның.

Шулай концерттарҙың береһендә Миләүшә Ғәли ҡыҙы бер үҫмерҙең иҫ китмәле моңло тауышына иғтибар итә. "Тәбиғәт биргән һоҡланғыс талантты әрәм итергә ярамай," — тип уйлай ул һәм концерттан һуң егетте эҙләп таба, уға училищеға килергә ҡуша. Киләсәктә күптәрҙең күңелендә мәңгелек моңдар ҡалдырған йырсы Илфаҡ Смаков шулай сәхнәгә аяҡ баҫа. Ошо осорҙа һәм һуңыраҡ Миләүшә Ғәли ҡыҙы Нажиә Аллаярова, Сажиҙә Ғәлимова, Мәжит Алкин һ.б. йырсыларҙы уҡыта.

1968 йылда Өфө сәнғәт институты үҙенең ишектәрен аса. Бер йылдан һуң унда вокал бүлеге асыла. Ошонда эшкә тәғәйенләнгән Миләүшә Ғәли ҡыҙы йәш таланттар менән эште дауам итә, районларға, ауылдарға сыға. Тырыш хеҙмәт үҙ емештәрен бирә.

1980 йылда М.Ғ.Мортазинаны кафедра мөдире итеп тәғәйенләйҙәр. Миләүшә Ғәли ҡыҙының оҫталығы йәш йырсыларға тауыш ҡуйыусы белгес булараҡ киң билдәле. Кешегә тәбиғәт һәм хоҙай биргән тауышты, илаһи моңдо һиҙгер ишетеүсе, үҫеш бейеклеген асыҡлаусы, дөрөҫ юлға һала белеүсе кеше ул. Тәү ҡарашҡа тауышы артыҡ көслө булмаған йәштәрҙе лә һәләтле йырсы итеп үҫтерә белә.

Ғәҙәттә, йылдар йырҙар бүләк итә, тиҙәр. Миләүшә Мортазинаға йылдар һәләтле йырсылар бүләк итә, дөрөҫөрәге, ул үҙе эҙләп таба буласаҡ таланттарҙы. Ул оҙаҡ йылдар йәш йырсыларҙың Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге конкурсында жюри рәйесе булды. Институт студенттарын да төрлө бәйгеләрҙә әүҙем ҡатнашырға саҡыра, уларға әҙерләнергә ярҙам итә.

Йыр һөйөүселәрҙең хәтерендәлер әле, 80-се йылдар башында беҙҙең байтаҡ йәш йырсыларыбыҙ СССР һәм бөтә донъя күләмендәге йыр бәйгеләрендә еңеп сыҡты. Ул саҡта "Йырсыларҙың Өфө мәктәбе" тигән термин киң таралғайны. Конкурс лауреаттары араһында Миләүшә Ғәли ҡыҙының уҡыусылары Радик Гәрәев, Венер Мостафин, Иҙрис Ғәзиевтар ҙа бар ине. Талантлы педагог улар өсөн остаз ғына түгел, әсәй ҙә, апай ҙа булды. Ауыр ваҡытта студенттар, ярҙам һәм кәңәш һорап, иң әлек уға мөрәжәғәт итәләр. Барыһына ла йылы һүҙ таба, ярҙам ҡулы һуҙа ул.

1982 йылда Борай районының Мулла урта мәктәбенең 8 синыф уҡыусыһы Фәдис Ғәниев Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге республика конкурсында лауреат исемен яулағайны. Таланттарҙан күҙ яҙлыҡтырмаған Миләүшә Ғәли ҡыҙы Фәдисте күҙ уңынан ысҡындырманы: унынсы синыфты тамамлаған һәм башҡа һөнәр һайларға йыйынған егетте институтҡа уҡырға килергә саҡырҙы, хатта уның ата-әсәһенә хат та яҙып ебәрҙе. Ә Фәдис Бөйөк Еңеүҙең 40 йыллығына арналған телевизион конкурсҡа ҡатнашырға килгәс, ай-вайына ҡуймай, уны уҡырға алып ҡалды. Һәләтле егет бына тигән итеп уҡып китә. Хәҙер инде Башҡортостанда ғына түгел, күрше төбәктәрҙә лә моңло йырҙары менән ҡыуандырған Фәдис Ғәниев бына шулай оло сәхнәгә аяҡ баҫа. Күпме юлдар үтелгән, күпме йырҙар йырланған, әммә уҡытыусыларының мөҡәддәс һүҙҙәре һәр саҡ иҫтәрендә.

"Әгәр үҫергә теләһәң, әле дөрөҫ йырламайым, бигүк яҡшы килеп сыҡмай, тип үҙ-үҙеңдән шикләи. Маһайыу — бөтөү тигән һүҙ. Профессиональ өлгөргәнлек барыһын да хәл итеп бөтмәй әле. Һеҙҙе ихласлыҡ, тулҡынланыу хисе ташламаһын. Тамаша залы менән бер йән, бер тән булып әүерелһәң генә моңоң кешеләр йөрәгенә барып етәсәк. Ижад кешеһе ғүмер буйы үҙен уҡыусы, өйрәнсек итеп хис итергә тейеш..."

Эйе, талант уңғандарҙы, тырыштарҙы, ныҡышмалдарҙы үҙ итә.

— Беҙгә егеттәр һәм ҡыҙҙарҙың төрлөләре килә, — ти Миләүшә Ғәли ҡыҙы. — Мин иң әлек уларҙың ялҡаулыҡтарын бөтөрәм, яҡшы йырсы булыу өсөн үҙ-үҙеңде аямай эшләргә кәрәклегенә инандырам.

Сәнғәт донъяһында М.Ғ.Мортазинаны "таланттарға юл асыусы" тип йөрөтәләр. Был ысынлап та шулай. Әйтәйек, уҡыусыларының береһе — Асҡар Абдразаҡов донъя күләмендә танылыу яулаған опера йырсыһы, халыҡ-ара конкурстарҙа лауреат булды,



05-2001.p65 134 27.07.01, 12:22

Гран-при яуланы, уның һәр сығышын бар ерҙә көтөп алалар.

Улы Владислав Мортазин да әсәһенең йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәне: халыҡ-ара конкурстар лауреаты, Башҡортостандың халыҡ артисы тигән абруйлы исемгә лайыҡ, республикабыҙҙың иң оҫта органда уйнаусыһы.

Бына шундай абруйлы, тынғыһыҙ шәхестәрҙең береһе ул вокал буйынса педагог, РСФСР-ҙың, БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, СССР юғары мәктәбе отличнигы профессор Миләүшә Ғәли ҡыҙы Мортазина. Әкиәттәрҙә тылсым таяғы менән күктә йондоҙҙар ҡабыҙған фәрештә төҫлө, ерҙә йондоҙҙар тоҡандыра ул. Ә йондоҙҙар ни тиклем күберәк булһа, донъя шул тиклем яҡтыраҡ һәм гүзәлерәк була. Йондоҙҙарың яҡтыраҡ балҡый барһын, йыр шишмәһен асыусы!